РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ
Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министрлығы
МУНИЦИПАЛЬ УЧРЕЖДЕНИЕ БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
БӨРЙӘН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫНЫҢ МӘҒАРИФ ИДАРАЛЫҒЫ
Башҡортостан Республикаһы Бөрйән районы
Аҫҡар **урта мәктәбенең Брәтәк филиалы**

| | | |
|---|---|---|
| «Ҡаралған» | «Килешелгән» | «Раҫланылған» |
| МБ ултырышында | Директор урынбаҫары: | Аҫҡар урта |
| Етәксеһе: | ________/Мөхәмәтов А.Ә. | мәктәбе директоры: |
| ___Ғиззәтуллина Д. Р. | «30» август 2023 й. | ___ Йәрмөхәмәтов И. И. |
| | | «30» август 2023 й. |

Протокол № 1
«30» август 2023 й.

# «Башҡорт теле» нән эш программаһы 2-4 кластар

2023-2024 уҡыу йылы

Төҙөүсеһе: башланғыс кластар уҡытыусыһы
Фәхрийәнова Илһөйәр Мөхәррәм ҡыҙы

**Брәтәк 2023 й.**

# Аңлатма яҙыу

Эш программаһы уҡытыу башҡорт телендә ойошторолған мәктәптәргә тәҡдим ителгән уҡыу программаһына, Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары талаптарына, милли мәктәптәр өсөн эшкәртелгән уҡыу планына, 2010-сы йылда сыҡҡан башҡорт мәктәптәренең башланғыс кластары өсөн «Әлифба» һәм «Башҡорт теле» буйынса төҙөлгән программаға (авторҙары Ф.Ш.Сынбулатова, Г.Ә.Вәлиева.-Өфө-Китап.2010), «Башҡорт теле» («Әлифба») дәреслегенә (авторы Ф.Ш.Сынбулатова. Өфө-З.Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте-2013.), 2-4-се кластар өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә, (автор Ф.Ш.Сынбулатова, һ.б.З.Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте), таянып төҙөлдө.

Был программала башланғыс кластарҙа башҡорт теле фәне буйынса уҡытыу тематикаһы, уның йөкмәткеһе һәм уҡыусы үҙләштерергә тейеш булған универсаль уҡыу эш төрҙәре системаһы, метапредмет, шәхси, предмет һөҙөмтәләре бар.

Мәктәп алдында, шулай уҡ тел дәрестәрендә, ҡуйылған иң төп **маҡсат** - баланы шәхес итеп үҫтереү.

Яңы стандарттар буйынса уҡыусыларҙа лингвистик (тел), аралашыу (коммуникатив), этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ булдырыу талап ителә.

**Лингвистик компетентлыҡ** (уҡыусыларҙың башҡорт теленән мәғлүмәтлелеге) өндәр һәм хәрефтәрҙе, һүҙьяһалышын, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе, һүҙ төркөмдәрен, һөйләм киҫәктәрен, лексик һәм грамматик берәмектәрҙе, лингвистик анализды һ. б. үҙ эсенә ала.

**Аралашыу (коммуникатив) компетентлығы** - уҡығанды һәм башҡалар һөйләгәнде аңлау, хәҙерге әҙәби башҡорт теленең нормаларына эйә булыу, һүҙ байлығын, телдең грамматик яғын дөрөҫ итеп үҙләштереү, телдән һәм яҙма формала бәйләнешле телмәр күнекмәләрен булдырыу һ. б.

**Этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ,** йәғни телде милли-мәҙәни юҫыҡта үҙләштереү - ул уҡыусыларҙың телгә өйрәнеү барышында милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырған текстар менән эшләүе, халҡыбыҙҙың тормош- көнкүреш, йола, ғөрөф-ғәҙәт үҙенсәлектәрен, шанлы үткәнен, әҙәп-әхлаҡ нормаларын, телмәр әҙәплелеген, һынлы сәнғәт әҫәрҙәрен, мәҙәниәтен, халыҡ ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен белеүе, башҡорт халҡының телмәр әҙәплелеген үҙләштереүе, рухи ҡомартҡыларын ихтирам итеүе һ. б.

Башланғыс мәктәптә башҡорт теле дәрестәрендә белем биреүҙең төп **бурыстары:**

-туған телдә камил һөйләшеү, фекереңде еткерә белеү, тел һәм телмәр күнекмәләрен тәрән үҙләштереүгә өлгәшеү;

-уҡыусыларҙың төрлө эшмәкәрлекте (уҡыу һәм белем алыу, хеҙмәт, аралашыу күнекмәләрен) үҙләштереүҙәренә ирешеү, универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү;

-башҡорт халҡының рухи мираҫын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;

-дәреслек, өҫтәмә материал, һүҙлектәр, белешмә әҙәбиәт менән эш итеү күнекмәләрен камиллаштырыу;

-башҡорт телен башҡа фәндәр буйынса белем алыу сараһы булараҡ ҡулланырға әҙерләү;

-уҡыусыларҙың логик фекерләү һәләттәрен үҫтереү.

Программаның бурыстарын тормошҡа ашырыу өсөн заманса эш методтарын һәм алымдарын ҡулланырға кәрәк. Дәрестә уҡыусыларға төплө белем нигеҙҙәре, ныҡлы күнекмәләр биреү менән бергә, уларҙың танып белеү эшмәкәрле- ген һәм фекерләүен

үҫтереүсе, дөйөм үҫешен тәьмин итеүсе алымдар һәм саралар менән файҙаланыу мотлаҡ талап булып тора. Уҡыусылар грамматик ҡағиҙәләрҙе практик эш нигеҙендә аңлап, әүҙем үҙләштерергә, алған белем- дәрен аңлата, нигеҙләй, иҫбатлай, ҡуллана белергә тейеш. Уҡыусыларға проект төҙөү методын ҡулланыу ҙа тәҡдим ителә.
Уңышҡа ирешеү өсөн тел дәрестәрен уҡыу дәрестәре менән тығыҙ бәйләп алып барыла.
Программа түбәндәге **принциптарға** таянып төҙөлдө:
1)һәр баланың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу;
2)фәннилек һәм системалылыҡ принциптары;
3)уҡыусыларҙы төрлө яҡлап өҙлөкһөҙ үҫтереү;
4)баланың психик һәм физик һаулығын һаҡлау.
Программаның нигеҙендә коммуникативлыҡ принцибы ята.

## Уҡыу предметына дөйөм характеристика

Башҡорт теле(грамотаға өйрәтеү) курсында предмет ярҙамында түбәндәге үҫеш юлдары тормошҡа ашырыла:
предмет кимәлендә белемгә эйә булыу;
уҡыу техникаһын үҫтереү, текстарҙы анализлау юлдарына эйә булыу;
яҙма һәм һөйләү телмәренә эйә ***булыу;***
тел тураһында белем алыу һәм системалаштырыу;
орфография һәм пунктуацияны өйрәнеү;
башҡорт теленең тәрбиәүи потенциалын ҡулланыу;
телде тойомлауҙы үҫтереү.

## Фонетика һәм графика

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә була:
-өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе айырыу;
-өндәргә характеристика биреү:һуҙынҡылар (нәҙек һәм ҡалын, баҫымлы
һәм баҫымһыҙ); тартынҡылар (яңғырау һәм һаңғырау, парлы һәм парһыҙ);
-башҡорт алфавитында хәрефтәрҙең урынлашыу тәртибен һәм уның әһәмиәтен үҙләштереү (һүҙҙәрҙе билдәле тәртипкә килтереү, алфавит ярҙамында кәрәкле мәғлүмәт эҙләү h. б.).

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы бирелгән схема буйынса өн-хәреф
анализын эшләргә өйрәнеү һәм уның дөрөҫ булыу-булмауын тикшереү мөм-кинселегенә эйә булырға тейеш.

## Орфоэпия

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек ала:
-башҡорт теленең нормаларын үтән уҡыу һәм һөйләү, әңгәмәселәренең телмәрендә был нормаларҙың үтәлешен баһалау (программала бирелгән күләм кимәлендә);
-белмәгән осраҡта һүҙлектән йәки дәреслектән дөрөҫ әйтелеш нормаларын үҙ аллы табыу йәки уҡытыусыға мөрәжәғәт итеү.

## Һүҙ составы

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә
була:
-үҙгәрмәүсе һәм үҙгәреүсе һүҙҙәрҙе айырыу;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙе һәм һүҙ формаларын таныу;
-һүҙҙәрҙә тамыр, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы табыу.
Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшерә белергә, анализ яһарға өйрәнеү мөмкинселегенә эйә була.

## Лексика

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә бу
лырға тейеш:
-һүҙҙең мәғәнәһен дөрөҫләү, кәрәк булған һүҙҙе айырып алыу;

-һүҙҙең мәғәнәһен текст буйынса йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса дөрөҫләү

**Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек ала**:

-бер төрлөлөктән азат булыу маҡсатында тейешле синонимдарҙы та
быу һәм ҡулланыу;
-сағыштырыу һәм теүәл характеристика биреү өсөн антонимдар ҡулланыу;
-текстағы телмәрҙә ҡулланылған тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе таныу;
- ябай фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһен аңлау һәм уларҙы телмәрҙә
ҡулланыу;
-һүҙҙәрҙе урынлы йәки урынһыҙ ҡулланыуҙы баһалай белеү;
-аралашыу мәсьәләһен урынлы хәл итеү маҡсатында тәкдим ителгән һүҙҙәрҙең тейешлеһен һайлал алыу.

**Морфология**

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә бу
лырға тейеш:
-исемдең һанын, затын, килешен, һөйләмдәге урынын билдәләү, исемдәргә морфологик анализ яһау;
-сифаттарҙың төрөн, дәрәжәһен билдәләү, уларға морфологик анализ яһау;
-ҡылымдың грамматик билдәләрен: һөйкәлешен, заманын, затын бил-
дәләү, морфологик анализ яһау;
-рәүештәрҙең грамматик билдәләрен таныу: үҙгәрмәүсе һүҙ төркөмөн,төрөн, дәрәжәһен белеү;
-алмаштарҙың грамматик билдәләрен таныу: һанын, затын;
-һандарҙың грамматик билдәләрен белеү: төрөн, төркөмсәләрен һ. б.

**«Башҡорт теле» предметының уҡыу планындағы сәғәттәр бирелеше**

Базис уҡыу планына ярашлы, Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү мәктәптәрендә «Башҡорт теле» предметын өйрәнеүгә башланғыс класта бөтәһе 460 сәғәт бүленә. (I класта грамотаға өйрәтеүгә - 106,(5-сәғәт) башҡорт теленә - 33(3сәғәт),туған телгә-23сәғәт, II, III, IV кластарҙа 102 - аҙнаһына 3-әр сәғәт (34 аҙнанан сығып).

**Уҡыу йөкмәткеһенең ҡиммәттәр йүнәлеше**

Башҡорт телен өйрәнеү һөҙөмтәһенең бер йүнәлеше булып башланғыс класс уҡыусылары тарафынан рухи ҡиммәттәрҙең системаһын төшөнөү һәм үҙләштереү тора. Башланғыс кластарҙа әсә теле дәрестәрендә түбәндәге **рухи ҡиммәттәр**гә иғтибар бүлеү мотлаҡ.

**Изгелек ҡиммәте** - үҙендә һанап бөтөргөһөҙ бәйләнештәр-ҙән торған донъяның бер өлөшө итеп тойоу, кешеләрҙең тел ярҙамында бер-береһе менән бәйләнеше әҙәплелекте таныуға нигеҙлнеуен аңлау.

**Аралашыу ҡиммәте** - аралашыуҙы йәмғиәттең, мәҙәниәттең әһәмиәтле бер өлөшө итеп таныу.

**Матурлыҡ (гармония) ҡиммәте** — башҡорт теленең матур, яғымлы халыҡ байлығы булыуын аңлап үҙләштереү.

**Хеҙмәт һәм ижад ҡиммәте** - хеҙмәт кешелек йәшәйешенең төп шарты, хәләте булыуын ҡабул итеү. Хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләүҙә уҡыу эшмәкәрлегенең әһәмиәте ҙур. Уҡыу эшмәкәрлеге барышында ойошҡанлыҡҡа, үҙаллылыҡҡа, яуаплылыҡҡа, хеҙмәтте һөйөргә өйрәнергә мөмкин икәнлеген аңлау.

**Илһөйәрлек ҡиммәте** - үҙ телеңде һәм халҡыңды хөрмәт итеү, халыҡтың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү, ғаилә, ил алдында бәләкәйҙән үк яуаплы булыуҙы тойоп үҫеү.

**Кешелеклелек ҡиммәте** - үҙең һәм башҡалар өсөн яуаплылыҡ тойон үҫеү, кешенең йәшәү урыны булған тәбиғәтте һаҡлау кәрәклеген аңлау.

**Башҡорт телен үҙләштереүҙең шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре**
Яңы стандарттарға ярашлы уҡыу сифатын өйрәнгәндә, йәғни тикшереү процесында, түбәндәге һөҙөмтәләр күҙаллана:
шәхси үҫеш кимәле;
метапредмет кимәле;
предмет буйынса белем кимәле.
**Шәхси үҫеш кимәле**. Баланы шәхөс итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.
**Метапредмет кимәле**. Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡырға, белем алырға өйрәтеү.
**Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү**: танып белеү, шәхси, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек. Шәхси эшмәкәрлек баланы уҡымышлы һәм аңлы шәхес итеп үҫтереү. Эшмәкәрлекте уның тормош һәм кешелеклелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи һәм мораль нормаларҙы аңлап ҡабул итеүеп, әйләнә- тирәләге күренештәргә һәм ваҡиғаларға шәхси ҡарашын формалаштырыуға йүнәлтеү.
**Ойоштороу эшмәкәрлеге** танып белеү процесы менән идара итеүҙе күҙ уңында тота: эшмәкәрлекте күҙаллау, планлашты- рыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәр индереү һәм баһалауҙы үҙ эсенә ала.
**Танып белеү эшмәкәрлеге** тейешле мәғлүмәтте эҙләп табыу һәм анализлауҙы, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләүҙе һәм ҡулланыуҙы тәьмин итә.
**Аралашыу эшмәкәрлеге** белем алыу процесында арала- шырға өйрәнеүҙе ойоштороу ға йүнәлтелгән. Ул башҡа кешеләрҙе тыңлай белеү һәм аңлауҙы, мәғлүмәтте теүәл тапшырыуҙы үҙ эсенә ала.
**Предмет кимәле**. Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

## 2-се класс

Уҡыу йылына -68 сәғәт(34 аҙна х 2 сәғәт)
2-се класта «Башҡорт теле»н өйрәнеү курсы тел ғилемен, телмәр эшмәкәрлеген үҙләштереүҙе артабан дауам итеү, туған тел аша донъяны танып белеү һәм социаль өлкәлә аң-белем алыу, мәҙәниәтле шәхес итеп тәрбиәләү маҡсатын ҡуя.
Күрһәтелгән маҡсаттарға ирешеү өсөн, түбәндәге ғәмәли мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк:
-лексика, фонетика, грамматика, синтаксис, орфография, пунктуация, телмәр үҫтереү өлкәһендәге белемдәрҙе, оҫталыҡты артабан нығытыу, кинәйтеү;
-коммуникатив компетентлыҡ: грамоталы яҙыу һәм уҡыу, диалогта ҡатнашыу, монологтар төҙөү һәм һөйләү;
-туған телгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, уны теләп өйрәнеү.

### Программа йөкмәткеһе

**I. Графика.** Хәреф һәм өн. Яя, Ее, Ёё, Юю хәрефле һүҙҙәр. Һүҙҙең өн моделе менән тамғаланышы. Уларҙың хәреф менән яҙылышы.
График тамғалар: һүҙҙәр араһында ара ҡалдырыу, юлдан юлға күсереү тамғаһы (дефис), ҡыҙыл юл (абзац).
**II. Морфология.** Һүҙ төркөмдәре. Предметтың атамаһы. «Кем?» һәм «Нимә?» һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уларҙың мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланылышы. Кешенең исем-фамилияһын, хайуандарҙың ҡушаматтарын, ер-һыу атамаларын белдереүсе һүҙҙәр.

Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Уларҙың мәғәнәһе. Ни эшләй? (бөгөн, хәҙер, ошо мәл), ни эшләне?(кисә), ни эшләр? ни эшләйәсәк ?(иртәгә, киләсәктә) һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.

Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Уларҙың мәғәнәһе. «Ниндәй?» һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр.

Ярҙамсы һүҙҙәр:һәм, менән; да-дә, ҙа-ҙә, та-тә, ла-лә; ғына-генә, ҡына-кенә. Уларҙың айырым торғанда мәғәнә аңлатмауы. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең телмәрҙә ҡулланылышы.

**III.Һүҙъяһалыш.** Тамырҙаш һүҙҙәрҙе уҡыу, яҙыу («тамыр», «ялғау» төшөнсәһе (термины) бирелмәй.

**IV. Синтаксис.** Һөйләм, һүҙбәйлйнеш, һүҙ (уларҙың оҡшашлығы, айырмаһы). Һөйләмде әйтеү маҡсаты. Һөйләмдә интонация. Хәбәр һөйләм. Һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә, хәбәр. Эйәрсән киҫәктәр.

**V. Орфография һәм пунктуация.** Дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләрен өйрәнеү һәм ғәмәли ҡулланыу. Баш хәреф. Һөйләм башы. Кешенең исем-фамилиялары. Хайуан ҡушаматтары. Ер-һыу атамалары. Ике кешенең һөйләшеүен диалог формаһында яҙыу. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләре. Һөйләмдә һаналып киткән һүҙҙәр араһында тыныш билдәләре. Уу-Үү, Оо-Өө, Ээ, Ыы хәрефле һүҙҙәр. Йә, йө, йү, йе һәм йо, йы ҡушымсалы һүҙҙәр. Ике өндө белдергән хәрефле (Яя, Ее, Ёё,Юю) һүҙҙәр. Һүҙ башында [уы],[уэ] өндәре (в хәрефе).

**VI. Телмәр үҫтереү.** Аралашыу ситуацияһы. Уға ярашлы һөйләшеү ҡороу. Текст. Тексты таныу. Текстын исеме, унын һөйләмдәренең мәғәнәи бәйләнеше. Текст абзацтары һәм уларҙың мәғәнәүи эҙмә-эҙлеклеге. Текст төҙө. Диалог (әнгәмә, бәхәс). Монолог (үҙ аллы һөйләнеү, сығыш яһау, иғлан, доклад). Аралашыу этикеты (сәләм биреү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт белдереү, үтенес менән өндәшеү).

**VII. Универсаль эш төрҙәренә өйрәнеү.**

Үҙ аллы белем алыу оҫталығына өйрәнеү. Уҡыу эшмәкәрлеге(маҡсатты күҙаллау, уҡыу материалы менән ҡыҙыҡһыныу, эште планлаштырыу, уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу, эҙләнеү эше, рефлексия, контроль). Аралашыу мәҙәниәте.

**Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр**

«Башҡорт теле» программаһын өйрәнеү процесында **уҡыусы өйрәнә:**

-һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса төркөмләргә. Уларға тейешле һорау ҡуйырға. Предметтың атамаһын, хәрәкәтен, билдәһен белдереүсе һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләү һәм яҙма телмәрҙә урынлы ҡулланырға;

-һүҙҙәрҙең өн моделен төҙөргә һәм уны хәрефтәр менән яҙырға;

-һөйләмдәр төҙөргә (телдән һәм яҙма), уларҙы тейешле һүҙ өҫтәп тулыландырырға;

-һөйләмдәрҙе әйтелеү маҡсатына ҡарап хәбәр, өндәү, һорау һөйләмдәргә айырырға. Уларҙы тейешле интонация менән уҡырға;

-һөйләмдең эйәһен, хәбәрен (баш киҫәктәрен) айыра белергә;

-башҡорт теленең дөрөҫ яҙылыш ҡанундарын, ҡағиҙәләрен үҙләштерергә:Уу-Үү, Оо-Өө, Ээ(е), Ыы хәрефле һүҙҙәр, һүҙҙә йә, йө, йү, йе(һүҙ уртаһы), йо, йы ҡушымсалары, һүҙ башында Яя, Ее,Ёё,Юю хәрефтәре, һүҙ башында В хәрефе, ярҙамсы һүҙҙәрҙен (һәм, менән; да-дә, ҙа-ҙә; та-тә, ла-лә; ғына-генә, ҡына-кенә) айырым яҙылышы. Һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәһе (нөктә, һорау, өндәү) ҡуйырға. Кеше исем-фамилияларын, хайуан ҡушаматтарын, ер-һыу атамаларын һәм һөйләмдең башындағы һүҙҙе ҙур хәрефтән яҙырға;

-8-10 һөйләмдән торған (35-40һүҙ)тексты күсереп яҙырға;

-30-35 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙа белергә; һүҙҙе ижеккә бүлергә, уны юлдан юлға күсерә белергә;

-тексты анлы уҡырға һәм унын йөкмәткеһе менән бәйләнгән эштәрҙе эҙмә-эҙлекле үтәргә. Уның нигеҙендә ҡоролған һөйләшеү йәки тикшереү эштәрен үтәргә;

-уҡыу ситуацияһына ярашлы диалогта ҡатнашырға.

**Универсаль укыу эш төрҙәрен үҙләштереүҙә**

-үҙ аллы уҡырға, мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырырға: белемде, мәғлүмәтте эҙләү күнекмәләре булдырырға (һорау, белешеү,мәғлүмәти сығанаҡтар менән эш һ.б.); тикшеренеү-эҙләнеү эшен планлаштырырға; парлап, төркөмләп, команда менән эшләргә;
-алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәргә;
-билдәләмә, ҡағиҙә, алгоритм, һығымта һ.б. График схема, модель, таблица ярҙамында теркәргә;
-диалог ҡорорға, укыу материалын тикшерергә, анализларға, һығымта яһарға;
-мәҙәниле аралашыу этикетына өйрәнергә: әңгәмәсене тынлай, хуплай белергә, аңламағаныңды итәғәтле итеп һорашырға, яуап алырға, һәм рәхмәтеңде белдерергә; үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткерергә, уны яҡлай белергә.

**Шәхси сифаттарҙы үҫтереү өлкәһендә**

-үҙ аллы эш итергә, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
-тиҫтерҙәренә, укытыусыға, ата-әсәһенә ҡарата ихтирамлы булырға;
-мәктәп йыһаздарына, укыу әсбаптарына һаҡсыл булырға;
-Тыуған илде яратырға; ерҙе, телде, һаҡларға;
-һаулыҡты һаҡларға;
-тиҫтерҙәреңә, уҡытыусыларға, яҡындарыңа, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға

## 4-се класс

Уҡыу йылына - 34 сәғәт

(34аҙна x 1 сәғәт)

4-се класс программаһы укыусының өс йыл буйы үҙләштергән тел ғилеме өлкәһендәге белемдәрен тулыландырыу һәм бөтөн бер системаға килтереү, телмәр эшмәкәрлеген тулыһынса формалаштырыу, универсаль уҡыу оҫталығын сифатлы кимәлгә күтәреү маҡсатын ҡуя.

I. **Фонетика һәм орфоэпия.** Ижек, баҫым, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар, парлы һәм парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар, өн һәм хәреф тураһындағы белемдәрен системаға һалыу. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙен үҙенсәлекле әйтелеше(орфоэпия). Һүҙгә тулы фонетик анализ.

II. **Һүҙ составы (морфемика).** Һүҙ составы (тамыр, ялғау). Тамырҙаш һүҙҙәр. Яһаусы(суффикс), үҙгәртеүсе ялғауҙар. Тамырға ялғау ҡушыу юлы менән һүҙ яһау (һүҙьяһалыш). Һүҙ составына анализ.

III. **Орфография һәм пунктуация.** Башҡорт теле орфограммаларын системаға һалыу. Тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйып, хатаһыҙ күсереп яҙырға, диктант, изложение, инша һәм башҡа тикшереү эштәрен үтәйалыу.

IV. **Синтаксис.** Һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм. Уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау һәм өндәү һөйләмдәргә айырыу. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Һөйләмгә синтаксик анализ.

V. **Морфология.** Һүҙ төркөмдәре. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр.

Исем. Исемдең предметты атау функцияһы. Исемдең һорауҙары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдең һан менән үҙгәреше. Исемдең эйәлек заты менән үҙгәреше. Исемдең килеш менән үҙгәреше. Килеш һорауҙары. Ҡалын һәм нәҙек килеш ялғауҙары. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреүе. Исемгә морфологик анализ.

Алмаш. Унын төркөмсәләре. Зат алмаштары. Килеш менән үҙгәреше. Һорау һәм күрһәтеү алмаштары. Алмашҡа морфологик анализ.

Сифат. Тамыр һәм яһалма сифаттар. Сифаттарҙың үҙгәреше. Сифат дәрәжәләре. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифатҡа морфологик анализ.

Рәүеш. Рәүештең яһалышы. Рәүеш төркөмсәләре. Рәүеш һәм сифат. Рәүешкә морфологик анализ.

Ҡылым. Ҡылымдын яһалышы. Тамыр, яһалма, ҡушма ҡылымдар. Ҡылымдарҙын үҙгәреше (заман, зат, һан, барлыҡ-юҡлыҡ). Үткән заман ҡылымдары. Уларҙын зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ, шаһитлы-шаһитһыҙ формалары. Хәҙерге заман ҡылымдары. Уларҙын зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Киләсәк заман ҡылымдарының зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Киләсәк заман ҡылымдарының төрҙәре (эш-хәрәкәттең үтәлеүенә икеләнеү, мотлаҡ ышандырыу). Ҡылым һөйкәлештәре. Бойороҡ һөйкәлеше формалары. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары. Уларҙын заман, зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Шарт һөйкәлеше ҡылымдары. Теләк һөйкәлеше ҡылымдары. Ҡылымға морфологик анализ.

Һан. Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һандарҙың башҡа һүҙҙәр менән оҡшашлығы. Һанға морфологик анализ.

**VI.Лексика.** Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Омонимдар. Синонимдар. Антонимдар. Нығынған һүҙбәйләнештәр. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.

**VII. Телмәр үҫтереү.** Бәйләнешле телмәр. Текст. Уның мәғәнәүи өлөштәре. Абзац. Ҡыҙыл юл. Идея-тематик йөкмәтке. Текст йөкмәткеһенең планын төҙөү һәм һөйләү. Инша. Изложение.

Телмәр этикеты.

**Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр**

«Башҡор теле» программаһын өйрәнеү процесында укыусы өйрәнә:

**1.Предмет буйынса белем алыуҙа**

-өндәрҙе төркөмләргә, һуҙынҡылар һәм тартынҡылар таблицаһына таянып, уларға тулы характеристика бирергә;

-һүҙ төркөмдәрен мәғәнәһе һәм һорауы буйынса айыра белергә;

-өйрәнелгән орфограммаларҙы эсенә алған, 70-80 һүҙҙән торған тексты каллиграфия талаптарына ярашлы грамоталы яҙа белергә;

-һүҙҙе яһалышы һәм һүҙ төркөмдәре буйынса тикшерә белергә, һүҙгә фонетик һәм морфологик анализдар эшләргә;

-һөйләмгә тулы синтаксик анализ: интонация буйынса һөйләм төрөн билдәләү, баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табыу, өйләмде мәғәнәһе яғынан бәйле һүҙбәйләнештәргә тарҡата белергә;

-70-80 һүҙлек текст буйынса изложение яҙырға, инша ижад итергә, тирә-яҡтағы күренештәрҙе һүрәтләп, хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙ бәйән итеп, текст төҙөп яҙа белергә.

**2.Универсаль укыу эш төрҙәрен үҙләштереүҙә**

-укыу процесына яуаплы ҡарарға, маҡсат ҡуя, эште планлаштыра белергә, укыу мәсьәләләрен сисә белергә;

-теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт тупларға, эҙләнеү эше алып барырға, унын буйынса презентация эшләй белергә;

-мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булырға, үҙ итергә, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышырға, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белергә;

-билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштерергә һәм телмәрҙә ҡуллана белергә.

**3. Шәхси сифаттарҙы үҫтереүҙә**

-үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарарға;

-мәктәп һәм класс йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булырға;

-һаулыҡты һаҡларға;

-тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы булырға;

-Тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белергә, уларҙы һаҡларға, халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнергә, таратырға.

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары.**

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:

1) һүҙҙәрҙе, фразаларҙы һәм һөйләмдәрҙе күсереү;
2) һүҙлек диктанты;
3) ғәҙәти диктанттар;
4) һорауҙарға яуаптар яҙыу;
5) изложениелар;
6) иншалар;
7) тестарға яуаптар яҙыу.

Һаналған яҙма эштәрҙең башланғыс кластарҙа үткәрелә торғандары элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыла. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, ҡағиҙәләрҙе ҡабатлау һ.б.

**Контроль характерҙағы яҙыу эштәренең һаны уҡыу йылы эсендә түбәндәгесә тәҡдим ителә:**

| Эш төрҙәре | Кластар | |
|---|---|---|
| | 2 | 4 |
| Күсереп яҙыу | 1 | 1 |
| Һорауҙарға яуаптар яҙыу | 1 | 1 |
| Диктант | 3 | 3 |
| Изложение | | |
| Инша | 1 | 1 |
| Бөтәһе | 6 | 6 |

Контроль характерҙағы яҙыу эштәренең күләме:

| Эш төрҙәре | Кластар | |
|---|---|---|
| | 2 | 4 |
| Һүҙлек диктанты | 6 – 8 | 10 - 12 |
| Диктант | 15 – 20 | 35 - 40 |
| Күсереп яҙыу | 25 – 30 | 45 - 50 |
| Инша | | 35 - 45 |

**БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН КАЛЕНДАР – ТЕМАТИК ПЛАН**

**2 КЛАСС**

| № п/п | **Дәрес темаһы** | **Үткәреү ваҡыты** | | **Иҫкәрмә** |
|---|---|---|---|---|
| 1. | Уҡымышлы булыу ни өсөн кәрәк? | | | |
| 2. | Ҙур хәреф. Һөйләм. | | | |
| 3. | Ҙур хәреф. Кеше исемдәре. | | | |
| 4. | Ҙур хәреф. Кеше фамилиялары. | | | |
| 5. | Ҙур хәреф. Ер-һыу атамалары. | | | |
| 6. | Ҙур хәреф. Хайуан ҡушаматтары. | | | |
| 7. | Тикшереү эше. | | | |
| 8. | Диалог. | | | |
| 9. | Диалог . | | | |
| 10. | Йәмғиәт урындарында осрашыу. Диалог. | | | |
| 11. | Яҡын кешеләрҙе ҡотлау, тәбрикләү. | | | |
| 12. | Әкиәт геройҙары. Аралашыу этикеты. | | | |
| 13. | Мәғлүмәт, белешмә эҙләү. | | | |
| 14. | Әйтем, һынамыш. Мәҡәл-әйтемдәр. | | | |
| 15. | Тикшереү  эше. | | | |
| 16. | Һөйләм. | | | |
| 17. | Һөйләм. | | | |
| 18. | Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә, хәбәр. | | | |
| 19. | Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә, хәбәр. | | | |
| 20. | Һүрәт буйынса өйрәнеү иншаһы.<br>“Торналы күл” | | | |
| 21. | Хәбәр һөйләм | | | |
| 22. | Хәбәр һөйләм | | | |
| 23. | Өндәү һөйләм | | | |
| 24. | Өндәү һөйләм | | | |
| 25. | Һорау һөйләм | | | |
| 26. | Һорау һөйләм | | | |
| 27. | Текст. Һөйләм | | | |
| 28. | Тикшереү  эше | | | |
| 29. | Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы | | | |
| 30. | Ҡалын һәм нәҙек  әйтелешле һүҙҙәр | | | |
| 31. | Һүрәт буйынса инша.<br>“Елдерәләр  саналар” | | | |
| 32. | Һүҙҙе юлдан-юлға күсереү | | | |
| 33. | У-ү хәрефтәре. | | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 34. | Һүрәт буйынса инша.“Шарлауыҡ янында” | | | |
| 35. | О-ө хәрефле һүҙҙәр. | | | |
| 36. | Изложение. «Терпе ҡыҙына күстәнәс» | | | |
| 37. | Ээ хәрефле һүҙҙәр. | | | |
| 38. | [э] өнө һүҙ уртаһында һәм аҙағында. | | | |
| 39. | Ыы хәрефле һүҙҙәр. | | | |
| 40. | Тикшереү эше. Контроль күсереп яҙыу . | | | |
| 41. | Йй хәрефле һүҙҙәр. | | | |
| 42. | Йй хәрефле һүҙҙәр. Уларҙың яҙылышы. | | | |
| 43. | Инша.”Һаумы, Яңы йыл!” | | | |
| 44. | [йа] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | | | |
| 45. | [йа] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | | | |
| 46. | [йу] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | | | |
| 47. | [йу] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | | | |
| 48. | [йэ] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | | | |
| 49. | [йэ] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | | | |
| 50. | [йо] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | | | |
| 51. | [йо] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | | | |
| 52. | Тикшереү эше. | | | |
| 53. | Һүҙ төркөмдәре. | | | |
| 54. | Предмет атамаһын белдергән һүҙҙәр. | | | |
| 55. | Предмет атамаһын белдергән һүҙҙәр. | | | |
| 56. | Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. | | | |
| 57. | Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. | | | |
| 58. | Предмет билдәһен белдергән һүҙҙәр. | | | |
| 59. | Предмет билдәһен белдергән һүҙҙәр. | | | |
| 60. | Һөйләмдең тиң киҫәктәре | | | |
| 61. | Ярҙамсы һүҙҙәр. | | | |
| 62. | Ярҙамсы һүҙҙәр. | | | |
| 63. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | | | |
| 65, 66 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | | | |
| 67 | Йыллыҡ тикшереү эше. | | | |
| 68 | Эшкә анализ. | | | |

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН КАЛЕНДАРЬ-ТЕМАТИК ПЛАН
## 4 КЛАСС

| № | Бүлек исеме | Дәрес темаһы | Үткәреү ваҡыты | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Яңы уҡыу йылы менән! | Һаумы, мәктәп! | | | |
| 2 | | Телмәр үҫтереү. Инша «Һаумы, мәктәп!» | | | |
| 3 | Фонетика. Һүҙьяһалыш | Фонетика. Өн һәм хәреф | | | |
| | | Һүҙҙәргә фонетик анализ | | | |
| | | Һүҙҙәрҙә Яя, Ее, Ёё, Юю хәрефтәренең яҙылышы | | | |
| 4 | | Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы | | | |
| | | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы | | | |
| 5 | | Ярҙамсы һүҙҙәренең дөрөҫ яҙылышы | | | |
| | | Диктант | | | |
| | | Тикшереү эше №1 | | | |
| 6 | Һөйләм | Нимә ул һөйләм? Баш һәм эйәрсән киҫәктәр | | | |
| | | Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр | | | |
| | | Һөйләмдең тиң киҫәктәре | | | |
| 7 | | Телмәр үҫтереү. Инша “Алтын көҙ” | | | |
| 8 | Морфология | Нимә ул морфология? Нимә ул исем? | | | |
| | | Исем. Һөйләмдә исемдәрҙе билдәләү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр | | | |
| | | Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше | | | |
| 9 | | Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреше | | | |
| | | Телмәр үҫтереү. Изложение “Иламаҫ” | | | |
| 10 | | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе | | | |
| | | Исемдәрҙә ҡалын һәм | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | нәҙек ялғауҙар | | | |
| | | | | | |
| 11 | | Рус теленән ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышы | | | |
| 12 | | Исемгә морфологик анализ яһау | | | |
| | | Ҡабатлау. Йомғаҡлау. | | | |
| | | Тикшереү эше № 3 | | | |
| 13 | | Телмәр үҫтереү. Инша “Ҡыш” | | | |
| 14 | Алмаш | Нимә ул алмаш? Уның төркөмсәләре | | | |
| | | Зат алмаштары. Эйәлек заты алмаштары | | | |
| 15 | | Һорау һәм күрһәтеү амаштары | | | |
| | | Телмәрҙә алмаштарҙы табыу. Килеш менән үҙгәртеү | | | |
| 16 | | Телмәр үҫтереү. Изложение | | | |
| 17 | Сифат | Нимә ул сифат? | | | |
| | | Тамыр һәм яһалма сифаттар | | | |
| | | Сифат дәрәжәләре | | | |
| 18 | | Төп һәм шартлы сифаттар | | | |
| | | Ҡабатлау. Күнегеүҙәр | | | |
| 19 | | Телмәр үҫтереү. Инша “Тәүге ҡар” | | | |
| 20 | | Сифаттың һөйләмдәге роле | | | |
| | | Сифатҡа морфологик анализ | | | |
| 21 | Рәүеш | Нимә ул рәүеш? Уның яһалышы | | | |
| | | Рәүештең төркөмсәләре | | | |
| | | Рәүеште сифат менән сағыштырыу | | | |
| 22 | | Телмәр үҫтереү. Инша “Яңы йыл” | | | |
| 23 | | Рәүешкә морфологик анализ | | | |
| 24 | | Диктант. Йомғаҡлау | | | |
| | | Тикшереү эше № 6 | | | |
| 25 | Ҡылым | Нимә ул ҡылым? | | | |
| | | Ҡылымдарҙың яһалышы | | | |
| | | | | | |
| 26 | | Ҡылымдарҙың үҙгәреше (заман, зат, һан, барлыҡ- | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | юҡлыҡ) | | | |
| 27 | | Үткән заман ҡылымдары | | | |
| | | Үткән заман ҡылымдарының үҙгәреше | | | |
| 28 | | Телмәр үҫтереү. Инша “Хоккей майҙансығында” | | | |
| 29 | | Хәҙерге заман ҡылымдары | | | |
| | | Хәҙерге заман ҡылымдарының үҙгәреше | | | |
| 30 | | Киләсәк заман | | | |
| | | Киләсәк заман ҡылымдарыны ике төрө | | | |
| 31 | | Телмәр үҫтереү. Изложение “Сәйер ҡош” | | | |
| | | Ҡылым һөйкәлештәре. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының үҙгәреше | | | |
| 32 | | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үҙгәреше | | | |
| 33 | | | | | |
| | | Шарт һөйкәлеше ҡылымдары | | | |
| | | Теләк һөйкәлеше ҡылымдары | | | |
| | | Морфологик анализ | | | |
| 34 | | Контроль диктант | | | |
| | | | | | |
| | Һан | Нимә ул һан? Ябай һәм ҡушма һандар | | | |
| | | Һан төркөмсәләре | | | |
| | | Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы | | | |
| | | Һандарҙың башҡа һүҙҙәр менән оҡшашлығы | | | |
| | | Морфологик анализ | | | |
| | | Контроль диктант | | | |
| | | | | | |
| | Лексика | Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр | | | |
| | | Ононимдар | | | |
| | | Синонимдар | | | |
| | | Антонимдар | | | |
| 27 | | Нығынған һүҙбәйләнештәр | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Контроль изложение | | | |
| | Үтелгәнде ҡабатлау | | | | |
| | | | | | |
| | | Исем | | | |
| | | Алмаш | | | |
| | | Сифат | | | |
| | | Рәүеш | | | |
| | | Ҡылым | | | |
| | | Һан | | | |